*Айрат ҠОБАҒОШОВ,*
*Өфө дәүләт сәнғәт институтының башҡорт музыкаһы факультеты деканы, доцент*



# Яңы факультеттың тәүге аҙымдары

***I Бөтә донъя башкорттары королтайында сығыш яһап, Башкортостан Республикаһының мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Х.Х. Ишморатов былай тигәйне: «Башкорт халкының музыка тарихы бик бай. Әлеге көндә Халык инструменттары цҙәге асыу эштәре алып барыла. Был цҙәктә фольклор йыйыусы төркөм, башкорт халык музыка коралдары етештереусе оçтахана, оркестр һәм музей буласак». Әлбиттә, ике королтай араһында цткән йылдар эсендә был эштәрҙең бөтәһе лә тормошка ашырылды тип әйтеп булмай, әммә мәҙәниәт һәм сәнғәт донъяһына башкорт балаларын куберәк йәлеп итеу йәһәтенән аткарылған эштәр бар.***

Быйылғы уҡыу йылы беҙҙең өсөн үҙенсәлекле. Бына бишенсе йыл сәнғәт институтының иң йәш факультеты яңы һөнәр — традицион музыка сәнғәте белгестәре әҙерләүҙе дауам итә.

Был эш 1989 йылда башҡорт музыкаһы һәм фольклоры кафедраһын төҙөүҙән башланғайны. Ул ваҡытта Өфө сәнғәт училищеһында ғына ҡурай класы бар ине, ә башҡа уҡыу йорттарында башҡорт музыка ҡоралдарында уйнарға өйрәтелмәне. Шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: ҡурай класын тамамлаусылар, башҡа бүлек уҡыусыларынан айырмалы рәүештә, артабан үҙ һөнәрен юғары музыка уҡыу йорттарында дауам итә алманы. Сөнки был һөнәргә бер генә юғары уҡыу йортонда ла уҡытылмай ине.

Яңы кафедраның нигеҙен халыҡ музыкаһының бай мираçын туплаған һәм уны ғилми яҡтан өйрәнгән фольклор кабинеты тәшкил итте. Ә инде сәнғәт училищеһының ҡурай класын тамамлаусылар беҙҙең тәүге абитуриенттарыбыҙ булды. Был ваҡытта фольклор кабинеты онотолған боронғо уйын ҡоралдарын тергеҙеү, уларҙа уйнау ысулдарын өйрәнеү йәһәтенән ҙур эш башҡарҙы.

Башҡа туғандаш халыҡтарҙың традицион уйын ҡоралдарында башҡарыу сәнғәтен өйрәнеү ҙә ҙур һөҙөмтә бирҙе. Улар нигеҙендә уҡыу-уҡытыу әсбаптары, методика

булдырылды. Уҡыу пландарын төҙөгәндә был өлкәлә бай тәжрибә туплаған башҡа юғары уҡыу йорттарына мөрәжәғәт иттек.

Проблемалар бөгөн дә етерлек, сөнки беҙгә барыһын да өр-яңынан башларға тура килде. Иң элек традицион музыка башҡарыу кафедраһы өсөн уҡытыусылар әҙерләргә кәрәк булды. Күптән онотолған уйын ҡоралдары — думбыра, ҡыл-ҡумыҙ, уларҙа уйнау ысулдарын табып, уҡыу процесына индереү мөһим ине. Методика, программа, репертуар яҙыу, уйын ҡоралдарын эшләү ҙә еңелдән булманы. Факультет эргәһендә башҡорт халыҡ ҡыллы уйын ҡоралдарын эшләү буйынса оҫтахана төҙөнөк. Сәнғәт институтының был башланғысы республикабыҙҙың ошо йүнәлештәге эшмәкәрлегенә ҙур йоғонто яһаны. Тиҙҙән музыка училищеларында һәм балалар музыка мәктәптәрендә фольклор бүлектәре асыла башланы. Ә Өфө сәнғәт училищеһының ҡурай класы башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары бүлегенә әүерелде. Аҙаҡтан ошо бүлектә башҡорт халыҡ уйын ҡоралдарының беренсе оркестры төҙөлдө. Унда ла беҙҙең уҡытыусылар һәм студенттар ҙур ярҙам күрһәтте.

Кафедра кимәлендә ойошторолған һәм 1996 йылда башҡорт музыкаһы факультеты итеп үҙгәртелгән факультеттың үҙенең оркестрын төҙөү мөмкинселеге тыуҙы. Ул студенттарға дирижерлыҡ һәм оркестр практикаһын үтеүҙә ҙур ярҙам күрһәтә. Оркестр шулай уҡ дәүләт сығарылыш һынауҙарын үткәреүҙә, йомғаҡлау концерттарында ҡатнаша. Бынан тыш факультетта ҡурайсылар ансамбле, фольклор-этнографик ансамбль ойошторолдо. Улар ҙа һәр төрлө сараларҙа даими ҡатнашып, үҙҙәренең оҫталығын арттыра бара. Уҡытыусылар һәм студенттар араһында башҡорт традицион музыка сәнғәтен Рәсәй Федерацияһы кимәлендә һәм шулай уҡ сит илдәргә сығып танытыусылар бар.

Бөгөн республикабыҙҙың музыка сәнғәтен беҙҙең факультетты тамамлаусыларҙан тыш күҙ алдында килтереүе лә ҡыйын. Улар филармонияларҙа, училищеларҙа, балалар музыка мәктәптәрендә уҡыта. «Башҡортостан» дәүләт телерадиокомпанияһында, шулай уҡ сәнғәт һәм мәҙәниәт өлкәһендә эшләүселәр ҙә байтаҡ. Уларҙың араһында маҡтаулы исемдәргә лайыҡ булғандары ла аҙ түгел. Уҙған йыл беҙҙең факультетты тамамлаған 26 кеше республикабыҙҙың ауыл һәм ҡалаларында уңышлы эшләп йөрөй. Башҡортостан дәүләт филармонияһы эргәһендә төҙөлгән Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестрының төп өлөшөн беҙҙең факультетты тамамлаған йәки унда уҡып йөрөгән студенттар тәшкил итә.

Төрлө кимәлдә үткән конкурс һәм фестивалдәрҙә беҙҙең студенттарыбыҙ ҙур еңеүҙәр яуланы. Улар араһында халыҡ-ара конкурстар лауреаттары Р.Юлдашев һәм Т.Муҡышев, халыҡ һәм һирәк осраған уйын ҡоралдарында башҡарыусыларҙың бөтә Рәсәй конкурсы дипломанттары Р.Ғәйзуллин, Т.Хәмитов, З.Шәйәхмәтов, ҡурайсыларҙың республика конкурсы лауреаттары Ҡ. Әбүбәкиров, А.Рәхмәтуллин, Н.Ҡайыҡбирҙин һәм башҡа бик күптәр бар.

Йомабай Иҫәнбаев исемендәге призға уҙған йыл үткән республика конкурсында башҡорт думбыраһы буйынса бөтә призДарҙы ла традицион музыка башҡарыу кафедраһы студенттары — Ә.Ҡушҡарова, Г.Билалова, Г.Үмәрғәлина яуланы. Ә ҡурайсылар араһында Т.Зәйнишев лауреат исеменә лайыҡ булды. Нефтекамала үткән халыҡ-ара «Дуҫлыҡ йыры — 2001» фестивалендә лә ул дипломант булғайны.

Был әле йәш факультеттың тик тәүге аҙымдары, киләсәктә лә беҙҙе ышаныслы еңеүҙәргә әйҙәгән юлдар көтә.